ОСКОН

Апрель, 2018 йыл Осҡондан ялҡын ҡабына

# Йыһан – Ерҙең бөйөклөгөн сағылдыра торған бер көҙгө……



Ер шары ниндәй ул? Түңәрәкме?

Әллә фил өҫтөндә? Торған бәрәмесме?

Һораужар күп ине,

Космос киңлеге

Халҡым өсөн ҡараңғы төш ине.

Шулай бер яҙ көнө совет кешеһе

Космос киңлеген яулап,

Ер шарын урап:

«Еребеҙ түңәрәк», - тине

***Нафикова Гөлназ, 7- се класс***

1961 йылдың 12 апреле СССР-ҙы планетала бер башҡа күтәрә. Был көндө беҙҙең ватандашыбыҙ Юрий Гагарин йыһанға оса. Ер йөҙөндә тәүге космонавт. Тап ошо ваҡиғанан һуң һәр үҫмерҙең тиерлек күңеленә, йыһангир булам, тигән хыял инеп урынлаша. Тора-бара Ай ҙа яулана, орбитаға юлдаштар күпләп осорола, яңынан-яңы асыштар яһала. Әле Марсты ентекләп өйрәнергә тырышалар, “ҡыҙыл планета”ла һыу тапҡылары килә. Төрлөсә фараздарға ышанһаҡ, киләһе йылдарҙа, ә бәлки, быуаттарҙалыр ҙа, йыһан туристары күбәйәсәк, кешеләр башҡа планеталарға барып йәшәйәсәк икән. Иҫ киткес камил тәртип менән хәрәкәт иткән йыһан беҙгә барыбер ҙә үҙ серҙәрен асып бөтмәҫ әле ул. Унда осаһы йыһангирҙар бөтмәҫ, әммә бөгөнгө йәштәр араһында, космонавт булам, тигәнен ишетмәҫһең. Замана балалары күбеһенсә банкир булырға хыяллана. Ә сикһеҙ космос өсөн беҙҙең Ер шары бер бәләкәй генә саң бөртөгөндәй.

# Наҙлы ҡояш



Ҡар иреп бөттө,

Яҙ килеп етте.

Ағастар күптән,

Бөрөһөн сиртте.

Сәскәне һыйпап,

Йылы ел иҫте.

Яҙҙың кәйефе

Беҙгә лә күсте.

***Ғимәлетдинова Юлиана , 5-се класс***

Ҡупшы ҡыҙҙай шишмә аға сылтырап,

Алыҫта монар ята тонйорап,

Турғай сырлап, былбыл йырлап һайраша,

Теле сыҡҡан йәш балалай былдырлап.

( М. Аҡмулла)

Ергә матур яҙ килде.Ҡышҡы һыуыҡтарҙан һуң, ҡалын болоттар аҫтына таҙа зәңгәр һауа күренә. Шундай таҙа һауа тик яҙ ғына булырға мөмкин. Ер аҫтына гөрләүектәр шылтырай башланы, көндән-көн күберәк боҙҙо ярып сығалар. Ҡоштарҙың һайрауы, өй баштарына тамсы тамғаны бөтә донъяға тарала, яҙ миҙгеленең тылсымлы йырына әйләнә. Тирә-яҡ ҡыбырлай башлай: йылы яҡтарҙан килгән ҡоштар оя ҡоралар, ҡояш көндән- көн йылыраҡ, яҡтыраҡ. Көн тыуған һайын, ҡалын ҡар күҙгә күренеп ирей. Беҙ яҙ матурлығын йәшеллектә, ҡоштар моңонда, сәскәләрҙә күрәбеҙ. Иң беренсе булып үгәй инә үләне сәскәләнә. Унан умырзая беҙҙе ҡыуандыра.

Көндәр яҡтыра һәм оҙоная. Яҙ килгәндә кешеләр ҙә ҡыуана. Оҙаҡламай ер аҫтынан йәшел үлән күренә башлай, ағастар йәшел күлдәктәрен кейә. Беҙгә яңы миҙгел генә килә түгел, тирә-яҡ донъя яңынан тыуа.

***Рафғутдинова Регина, 10-сы класс***

# нурҙарын һибә



Яҙҙар еткәс гөрләүектәр аға,

Ҡояш ҡарай безгә йылмайып,

Урамдарҙа уйнай бала- сағa,

Бар донъяны ҡарап, һағайып

Ҡоштар ҡайта беҙҙен яҡҡа тағы …

Ағастар ҙа аса бөрөләр.

Тәбиғәттең тик уянған сағы,

Шаулар әле урман, гөрөлдәр.

***Азаматова Сәлимә, 8-се класс***

Көтөп алған яҙ етте. Ҡояш йылы нурҙарын һибә. Ҡар яйлап иреп, ергә һеңә бара. Тауҙарҙан шаулап-гөрләп, сылтыр-сылтыр гөрләүектәр аға. Бала-сағa уларҙа ҡағыҙҙан яһалған кәмәләр ағыҙа. Өй ҡыйыҡтарынан, бер-береһе менән уҙышҡандай, тып-тып итеп тамсылар тама. Көндәр оҙоная, ә төндәр, киреһенсә, ҡыҫҡара бара. Йылы яҡтан ҡоштар ҡайта, беҙ уларҙы ҡаршы алырға әҙерләнәбеҙ. Оялар яһап, ҡойма, өй баштарына ҡаҙаҡлап ҡуйҙыҡ. Оҙаҡламай ағастарҙың бөрөләре бүртер, тау биттәрендә үләндәр күренә башлар. Бар донъя йәшеллеккә күмелер!

***Карамова Алина, 11-се класс***



# 1 апрель – көлкө көнө

Йола буйынса 1 апрелдә шаяндар тағы ла шаянлана төшә. Тәү башлап уны боронғо Римдә үткәргәндәр тигән фараздар ҙа йәшәп килә. Рәсәйҙә иһә был көн мәжүсилек осоронан күсеп килгән йола һәм ғөрөф-ғәҙәттәр менән дә бәйле. Элегерәк уны апрель башы һәм март аҙағында - көн менән төн тигеҙләшкән осорҙа байрам иткәндәр. Көн шаяртыуҙар, күңелле уйындар менән үрелеп барған. Беренсе апрель береһенә лә ышанма тигән һүҙҙәр һаман да көнүҙәклеген юғалтмаған. Был көндәге шаяртыуҙар кешелек тарихындағы мөһим ваҡиғалар исемлегенә лә индерелгән.

Көлөү – кеше күңеленең иң күркәм сифаты. Көлөү тормошто шат яһай, матурлай.Ә кешелә ошо гүзәл тойғоларҙы уята белгән яҙыусы – икеләтә бәхетле. Ул үзенең күңел көрлөгө менән генә кинәнеп ҡалмай, башҡаларҙы ла тоҡандыра, шат кинәндерә. Көлөү шул шул уҡ ваҡытта үҙенә ҡаршы йүнәлдерелгән дошмандарҙы аяуһыҙ үлтерә лә!

Баязит Бикбай

Тормошобоҙҙа көлкө, шаярыу булмаһа, йәшәүе ниндәй күңелһеҙ булыр ине. 1апрель – Көлкө көнө. Шул байрамды бөтә илдәрҙә лә үткәрелә – ул көлөү, шаяртыу, шаярыу, мәҙәк, ҡыҙыҡ, мәрәкәләргә бай. Көлкө көнөн күптәр ҙур түҙемһеҙлек менән көтә, һәм үҙҙәренең дуҫтарынан, таныштарынан көлөү тураһында уйлай. Бындай ыңғай байрам тураһында онотторға ярамай. Көлкө көнө ысын күңелдән күңел асырға бер сәбәп бит ул. Көлкөү ғүмерҙе оҙайта, йәшәүгә көс-дәрт бирә.



***Гәрәева Әлиә, 11-се класс***




Баш мөхәррир: Ильясова Г.М. Компьютер версткаһы: Стрижова И.М.
Мөхәрриәт: 5-11 класс уҡыусылары.